**9-11 класстар өсөн интернет-олимпиада яуаптары.**

1.Балҡый-тамыр,

Белмәйһегеҙ: бел-мәй-һегеҙ-тамыр,

Шатланам шат-лан-ам - яһалма (морфематик юл менән яһалған),

Ырғыймын ырғы-й-мын-тамыр,

Ҡанатланам ҡанат-лан-ам- яһалма( морфематик юл менән яһалған).

2.Яҡшы-[йаҡшы], ике ижек:[йаҡ-шы],1-се ижек-ҡапланған, ябыҡ, баҫымһыҙ;2-се ижек- ҡапланған, асыҡ, баҫымлы. 4 хәреф, 5 өн. "Я" хәрефе ике өндә белдерелә.

я-[й]-тартынҡы, яңғырау, талғын, ышҡыулы,тел уртаһы.

[а]-һуҙынкы,урта рәт һуҙ., түбән күтәрелеш(киң) һуҙ.,иренләшмәгән,ҡалын,баҫымһыҙ.

ҡ-[ҡ]-тартынҡы,һаңғырау,парлы,шатрлаулы,тел:тел арты, артҡы аңҡау,шаулы.

ш-[ш]-тартынҡы,һаңғырау,парлы, тел:тел алды, алғы аңҡау,ышҡулы,шаулы.

ы-[ы]-һуҙынкы,урта рәт һуҙ., урта күтәрелеш һүҙ., ирешләшмәгән, ҡалын,баҫымлы.

3.Протеза.

4.Редукция.

5.Элизия.

6.а-эйәһеҙ һөйләм.

б-өатнаш ҡушма һөйләм.

7.Даръя-сиге рүренмәгән ҙур һыу ,бик ҙур йылға;

-күп мәғәнәле һүҙ, күсм. Ниҙеңдер күплеге,сикһеҙлеге.

- һөйләмдә туры мәғнәлә ҡулланылған;

-Даръя һүҙенең синонимы-диңгеҙ;антонимы итеп инеш һүҙен

рүрһәтергә була: даръя(ҙур һыу)-инеш(бәләкәй һыу);
-фразеологик берәмеге:күҙ -даръя бит ул; мәҡәл:һыу һыуға ҡойор, һыу даръяға ҡойор;
-был һүҙ фарсы теленән үҙгәштерелгән;
-даръя һүҙе иҫкергән һүҙҙәр составына инә, архаизм;
-пассив ҡулланылышлы, битараф лексикаға ҡарай.

8.а-күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм(ваҡыт эйәрсән һөйләмдәр, тиң эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләм.

(ваҡыт һөйләм), (ваҡыт һөйләм),[ һөйләм ].

б-тиң аныҡлаусы ябай таҡау һөйләм формаһында теҙем.

9.Архаизмдар.

10.Фразеологик берәмек.

11.Лексик мәғәнә курһәткесе.

12.Һайын-төп бәйләүес, ярҙамсы һүҙ, **көсәйтеү** бәйләүесе, исемдең төп килешен талап итә.

13.Йәштәр, тыуған ер матурлығына һоҡланып, оҙаҡ-оҙаҡ алыҫтарға күҙ ташлап, тынып торҙолар. Айырымланған рәүеш хәлдәре өтер менән айырыла.

14.а)хәбәр
б)эйә,хәбәр
в)хәбәр
г)аныҡлаусы
д)инеш һүҙ
е)хәл
ж)эйә

15.Башҡорт яҙыуы фонетик принципҡа нигеҙләнгән.

16.Монолог. Текстың функциональ-семантик төрө- тасуирлаусы.

17.Параллель бәйләнеш.

18.Публицистик. Был стилдә мөһим ваҡиғалар яҡтырыла,газета-журнал мәҡәлдәре, белдереүҙәр яҙыла.

19.Архаизмдар:мәҙрәсә, шәкерт, яһаҡ, әләм, ялпы, заң.

Историзмдар: баяр, кенәз, тархан, кантон.

20.Өфөлә беренсе трамваә 1937 йылда йөрөй башлаған. Трамвай юлының оҙонлоғо 9 километр самаһы булған. Ҡаланы барлығы 13 трамвай ғына хеҙмәтләндергән. Өфөлә беренсе троллейбус 1962 йылда барлыҡҡа килгән. Бер генә маршрут буйынса йөрөгән: Дуҫлыҡ монументынан ауыл хужалығы институтына ҡәҙәр.